**КИТЕРИИ И СИСТЕМИА ОЦЕНИВАНИЯ**
**ЧАСТЬ 1. БАШКИРСКИЙ ЯЗЫК**

| Ответы | Критерии | Максимальный балл |
| --- | --- | --- |
| **Задание 1.** Тартынҡыларҙың яһалыу урыны буйынса бүленеше | 2 балла – за неполный ответ | **2 балла** |
| **Задание 2.** Ирен-теш тартынҡылары | 2 балла - за неполный ответ | **2 балла** |

| | | |
|---|---|---|
| **Задание 3.** Эпентеза | 1 балл - за правильный ответ | **1 балл** |
| **Задание 4.** *баҡса* – тамыры, *баҡсасы* – нигеҙе, *-сы* – яһаусы ялғау, *-лар, -ҙың* үҙгәртеүсе ялғауҙар | 4 балла- за каждый правильно указанный аффикс;<br>1 балл - за правильное указание основы слова<br>1 балл - за правильное указание корня слова | **6 баллов** |
| **Задание 5.** *Айырылған, тупланған* – сифат ҡылымдар, *булған* – хәбәр һөйкәлеше ҡылымы | 1 балл - за каждый правильно указанный вид глагола | **3 балла** |
| **Задание 6.** <u>Күҙлегем</u> | 1 балл - за правильный ответ | **1 балл** |
| **Задание 7.** Төшөм килештә | 1 балл - за правильный ответ | **1 балл** |
| **Задание 8.** Сифат ҡылым | 1 балл - за правильный ответ | **1 балл** |
| **Задание 9.** Хәбәр | 1 балл - за правильный ответ | **1 балл** |
| **Задание 10.** Эйәһеҙ һөйләм | 2 балла - за правильный ответ | **2 балла** |
| **Задание 11.** Тултырыусы эйәрсән һөйләм | 2 балла - за правильный ответ | **2 балла** |
| **Задание 12.**Тиң тултырыусы эйәрсәнле ҡушма һөйләм | 4 балла - за полный правильный ответ | **4 балла** |
| **Задание 13.**Әйтелеше буйынса һүҙҙең грамматик формаһы нисек кенә үҙгәрмәһен, уның тамыры үҙгәрешһеҙ бер үк төрлө яҙыла | 2 балла - за правильное объяснение морфологического принципа написания слов | **2 балла** |
| **Задание 14.**Кириллды | 2 балла - за правильный ответ | **2 балла** |
| **Задание 15.**Эйәлек заты, килеш ялғауҙары | 2 балла - за каждый правильно указанный аффикс | **4 балла** |
| **Задание 16.** Егетмен, укыусыларһығыҙ | 1 балл- за каждое правильно указанноеслово | **2 балла** |
| **Задание 17.**Сифат ҡылым | 2 балла - за правильный ответ | **2 балла** |
| **Задание 18.**Дүрт һөйләмдән | 4 балла - за полный правильный ответ | **4 балла** |
| **Задание 19.**Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләм | 4 балла - за полный правильный ответ | **4 балла** |
| **Задание 20.**Ҡатнаш ҡушма һөйләм | 4 балла - за полный правильный ответ | **4 балла** |
| **Максимальный балл – 50** | | |

## ОТВЕТЫ И СИСТЕМА ОЦЕНИВАНИЯ

## ЧАСТЬ 2. БАШКИРСКАЯ ЛИТЕРАТУРА

| Ответы | Критерии | Максимальный балл |
|---|---|---|
| **Задание 1.** Ауыҙ-тел әҙәбиәте – фольклор менән яҙма әҙәбиәт араһында торған күренеш, һүҙ сәнғәтенең бер тармағы. Ул – профессиональ авторҙың телдән сығарылып, тексын үҙгәртмәйенсә телдән таратылған һәм үҙенең конкрет уй-ҡараштары, эстетик идеалдары, индивидуаль стиле, һүрәтләү саралары сағылыш тапҡан ижад емеше. Яҙма барлыҡҡа килгәнгә тиклемге бер этапты тәшкил итә, уға тиклем телдән телгә үҙгәрешһеҙ күсеп йөрөй. (2,5 балл).<br>Яҙма әҙәбиәт – әҙәби телдә йәшәгән, конкрет авторҙың донъяға ҡараштарын, идеалдарын, тормош концепцияһын үҙендә йөрөткән ижад (2,5 балл). | За каждый правильный ответ - по 2,5 балла | **5 баллов** |
| **Задание 2.** Халыҡ тормошонда йәки тарихта булып үткән мөһим хәл-ваҡиғалар, тарихи шәхестәр тураһында һөйләгән сәсмә әҫәрҙәрҙе – халыҡ хикәйәләрен – *риүәйәт* тип (2,5 балл), ә фантастик элементтар киң урын алғандарын *легенда* тип атайҙар. Улар әкиәттәргә яҡын. Был жанрға ҡараған әҫәрҙәр мифологик, топонимик, тарихи, тормош-көнкүреш тематикалы булыуы менән билдәле (2,5 балл). | За каждый правильный ответ - по 2,5 балла | **5 баллов** |
| **Задание 3.** Әйбер һәм күренештәрҙе (ғәҙәттә, кеше тәбиғәтенә ҡағылышлы хәл-ваҡиғаларҙы) тормоштоң бөтөнләй башҡа өлкәһендәге (ҡағиҙә булараҡ, үҫемлектәр һәм хайуандар донъяһындағы) икенсе бер әйберҙәр аша кинәйәләп һүрәтләүсе троп *аллегория* тип йөрөтөлә (2,5 балл.*)* Ҡайыш менән Йүкә - аллегорик образдар. Тәүгеһе кире йөкмәткегә эйә, байҙарҙы, халыҡты иҙеүселәрҙе символлаштыра. Икенсеһе – ябай халыҡты, уның социаль хәлен, шул уҡ ваҡытта көсөн кәүҙәләндерә (2,5 балл.) | За каждый правильный ответ - по 2,5 балла | **5 баллов** |
| **Задание 4.** В.Маяковскийҙан алған юлдар поэманың идея-тематик йүнәлешенә туранан-тура ҡағылышлы. Эпиграф әҫәрҙең йөкмәткеһен, яҙыусы әйтергә теләгән фекерҙе аңлау өсөн асҡыс булып тора. Әҫәрҙе уҡымаҫ элек үк уның эстәлеге, героик йөкмәткеле булыуы аңлашылып тора. | 5 баллов - за полный правильный ответ | **5 баллов** |
| **Задание 5.** Был шиғыр халыҡ йыры жанрын | За каждый правильный | **5 баллов** |

| | | |
|---|---|---|
| хәтерләтеп тора (2,5 балл). Ул йөкмәткеһе менән тәрән мәғәнәле, һүҙҙәре ябай, бик халыҡсан яңғырашлы, ритм йәһәтенән төҙөк (2,5 балл). | ответ - по 2,5 балла | |
| **Задание 6.** “Һуңғы һартай” – хикәйәт<br>“Ғилмияза – йыр<br>“Ерәнсә сәсән” - әкиәт<br>“Бошман-Ҡыпсаҡ батыр” - тарихи хикәйә<br>“Алтын алма” – әкиәт<br>М.Ғафуриҙың “Гөлдәр баҡсаһында” әҫәре - ода<br>М.Кәримдең “Ташлама утты, Прометей!” әҫәре – трагедия<br>Ж.Кейекбаевтың “Туғандар һәм таныштар”ы – роман<br>Ә.Бикчәнтәевтың “Бөркөт һауала үлә” – повесть<br>Р.Ғариповтың “Уйҙарым” әҫәре - ҡобайыр<br>(Һәр дөрөҫ яуапҡа 0,5 балл ҡуйыла) | За каждый правильный ответ - по 0,5 балла | **5 баллов** |
| **Задание 7.** Роман – бик күп образдарҙың яҙмышы аша ҡатмарлы һәм ҡаршылыҡлы халыҡ тормошон ҙур ваҡиғалар һәм ваҡыт эсендә тасуирлаған эпик жанр (2,5 балл). Уның *биографик, документаль, тарихи, фәлсәфәүи, социаль-психологик* һ.б. жанр формалары булырға мөмкин (2,5 балл). | За каждый правильный ответ - по 2,5 балла | **5 баллов** |
| **Задание 8.** Художество методы булараҡ *реализм* тормоштағы хаҡиҡәтте реаль тормоштоң үҙ формалары һәм күренештәре (факт, ваҡиға, тарих) аша тасуирлауға нигеҙләнә (2,5 балл). *Тәнҡитле реализм* – тормошто шулай уҡ тәрән дөрөҫлөктә сағылдыра, әммә йәмғиәт ҡоролошоноң нигеҙҙәрен тәнҡит итә, хәл ителмәй торған ҡаршылыҡтарҙы асып бирергә ынтыла (2,5 балл). | За каждый правильный ответ - по 2,5 балла | **5 баллов** |
| **Задание 9.** С.Юлаев, С.Аксаков, М.Аҡмулла, М.Өмөтбаев, Ш.Бабич, М.Ғафури, Ш.Хоҙайбирҙин, Ғ.Сәләм, Һ.Дәүләтшина, Ғ.Ибраһимов, З.Биишева, Р.Ғарипов һ.б.<br>*(Һәр исемгә – 0,5 балл).* | За каждый правильный ответ - по 0,5 балла | **5 баллов** |
| **Задание 10.** *Экспозиция* (2,5 балл). Әҫәрҙә буласаҡ ваҡиғаларҙың ҡасан һәм ҡайһы урында, кемдәр ҡатнашлығында буласағы хаҡында мәғлүмәт бирелә (2,5 балл). | За каждый правильный ответ - по 2,5 балла | **5 баллов** |
| **Максимальный балл – 50** | | |